***Ҡәҙим* АРАЛБАЙ**

# Донъяны ураған ҡурай



*Йомабай Мотиғулла улы Иҫәнбаев*

Быйыл музыка һөйөүселәр һәм бөтә республикабыҙ йәмәғәтселеге заманында Мәскәү, Париж, Берлин, Стокгольм сәхнәләрендә сығыш яһап, донъяны таң ҡалдырған, профессиональ ҡурай сәнғәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, мәшһүр ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаевтың тыуыуына 125 йыл тулыуҙы билдәләй.

Иҫәнбаев Йомабай Мотиғулла улы 1891 йылдың 21 сентябрендә Башҡортостандың хәҙерге Хәйбулла районы Үрге Смак ауылында түңгәүер ырыуы башҡорто ғаиләһендә тыуған. Бала саҡта ул аҙ ғына булһа ла уҡып, яҙыу танырға өйрәнгән.

Йәштән үк зирәк, отҡор Йомабай йыр ярата, йыраусыларҙың йыр-көй тарихын һөйләүҙәрен бирелеп тыңлай. Байҙарға ялсылыҡта көтөү көткәндә ҡурай тартырға өйрәнә. Тарихи көйҙәрҙе ул ауылдашы Һибәтулла Ҡотошов тигән оҫта ҡурайсынан һәм үҙенең ике туған ағайҙары Ғәббәс, Сибәғәт, Ғәйнулланан отоп ала. 17 йәшендә үк ул йөҙҙән ашыу башҡорт халыҡ көйөн ҡурайҙа иркен уйнай белгән. Оҙон буйлы, киң күкрәкле, еңел хәрәкәтле, үткер ҡарашлы, төҫкә һылыу был егет һабантуйҙарҙа, тирә-яҡта үткәрелгән ҙур йыйын-байрамдарҙа тәжрибәле ҡурайсылар, сәсәндәр менән ярыша башлай.

Совет власын ысын күңелдән ҡаршылаған Йомабай Иҫәнбаев ҡустыһы Ғәлимйән менән бергә, ҡулына винтовка тотоп, аҡтарға ҡаршы көрәштә актив ҡатнаша. 1920 йылда ул Коммунистар партияһы сафына инә. Яҡташтары уны ауыл Советы рәйесе итеп һайлайҙар, 2-се Түңгәүер волосы башҡарма комитеты ағзаһы итеп тә күрһәтәләр. Волоста, кантонда үткәрелгән һәр бер йыйылыш

йә йыйын ауылдарҙан килгән вәкилдәрҙең уйын-көлкөһө, төрлө концерттар менән тамамланыр булған. Йомабай Иҫәнбаев үҙенең ялҡынлы һүҙе менән дә, ҡурай моңо менән дә бөтә был йәмәғәт эштәренең уртаһында була.

1921 йылдың декабрендә Й.Иҫәнбаев халыҡтан аҙыҡ-түлек һалымын йыйыу кампанияһы осоронда «продналог йыйыуға ризаһыҙлыҡ белдереүҙә һәм советҡа ҡаршы агитация алып барыуҙа» нахаҡҡа ғәйепләнә. Ләкин был осорҙа булған бер нисә амнистия нигеҙендә Башҡорт АССР-ы ОГПУ-һы ҡарары менән ул 1923 йылдың 28 ноябрендә аҡлана.

1925 йылдың июнь айында Мәскәүҙән Мәғариф халыҡ комиссары А.В.Луначарскийҙың Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитетына килгән телеграммаһы буйынса Парижда асыласаҡ Бөтә донъя декоратив сәнғәт күргәҙмәһенә ебәреү өсөн ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаевты Өфөгә саҡырып алалар. Бер нисә көндән инде ул илебеҙҙең төрлө мөйөштәренән йыйылған халыҡ таланттары менән бергә баш ҡалабыҙ Мәскәүҙә була.

Парижда буласаҡ концерттар программаһы Мәскәү тамашасыларына ике тапҡыр күрһәтелә. Милли республикаларҙан килгән артистарҙың, һәм бигерәк тә Йомабай Иҫәнбаевтың, сығышы юғары баһа ала. Был концерттарҙа ул «Урал», «Буранбай» һәм «Перовский» көйҙәрен башҡара, һуңғы концерт хаҡында «Правда» газетаһы (1925 йыл, 26 июнь) быны нимә тип яҙҙы: «Концерт һоҡланғыс! Сезондың сағыу балҡышы. Башҡорт ҡурайсыһы Иҫәнбаев, ҡаҙаҡ йыраусыһы Әмре Ҡашаубаев, үзбәк бейеүсеһе һәм йырсыһы Тамара ханым, әрмән инструменталь триоһы — Сукиасов, Харибекишвили, Қахуров — союздаш республикаларҙың «атҡаҙанған исемдәре» буйынса ғына түгел, ә ысын мәғәнәһендәге халыҡ артистары. Уларҙың «примитив» сығыштары художество кимәле һәм башҡарыу оҫталығы буйынса Европаның ҡайһы бер виртуоздары номерҙарынан һис кенә лә ҡалышмай. Улар шундай ябай музыка ҡоралдары менән тыңлаусыға иҫ киткес ҙур эмоциональ һәм эстетик йоғонто яһауға ирешә».

Францияның баш ҡалаһындағы беренсе концерт 1925 йылдың 20 июлендә була. Совет артистары Париж тамашасылары өсөн бөтәһе 11 концерт ҡуя. Публика һәм музыка белгестәре ҡурайҙы бик оҡшаталар, унық менән ныҡ ҡыҙыҡһыналар. Ҡурайсыны оҙаҡ алҡышлап, һәр саҡ бер нисә тапҡыр сығарып уйнатҡандар. Шуға күрә концерт программаһында ҡурайға — ике, башҡа музыка ҡоралдарына бер генә номер бирелә. Бер ваҡыт бер француз, сәхнәгә күтәрелеп, ҡурайҙың эсендә ниндәй сер барлығын белеү өсөн, яҡтыға үтә ҡарап, уны тикшерә икән. Шул урында Йомабай Уралдан тамыры менән алып килгән таҡыя башлы ҡурайҙы тамашасылар алдында һигеҙ тотам итеп үлсәй ҙә, үткер бәкеһе менән тиҙ генә ҡырҡып, уйымдарын эшләп, «Байыҡ» көйөн уйнап та ебәрә. Шул саҡ сәхнәгә бер ханым сыға ла, ҡулындағы алтын балдағын Йомабайҙың бармағына кейҙереп, унық ҡулын ҡыҫа.

Башҡорт ҡурайсыһы Йомабай Иҫәнбаев менән ҡаҙаҡтың оҫта йыраусыһы һәм думбырасыһы Әмре Ҡашаубаевты Сорбонна университеты фонография кабинеты мөдире профессор Перно үҙенә ҡунаҡҡа саҡырып, уларҙың көйҙәрен фонографҡа яҙып ала. Фонографҡа яҙылғанда Й.Иҫәнбаев «Урал», «Буранбай», «Ҡара юрға» һәм «Байыҡ» көйҙәрен уйнаған.

Париж газеталары совет артистарының сығышына юғары баһа биреп бара. Мәсәлән, «Парижский еженедельник» газетаһы 1925 йылдың 31 июль һанында шулай яҙа: «Беҙгә ысын халыҡ сәнғәтен — башҡорт, ҡаҙаҡ, үзбәк халыҡтарының музыкаһын ишетергә тура килде... Тәбиғилеге, моңға бай булыуы менән улар музыканың хәҙерге ҡуйылышынан бөтөнләй айырылып тора, аңлатыу мөмкин булмағанса, үҙҙәренең эске серле, сихри моң-зарҙары менән ғәжәпләндерә... Беҙҙең алдыбыҙҙа тикшерелмәгән яңы, бай моң даръяһы ята...

...Ваҡыты менән ошо музыка ҡоралдары тауышына һағышлы һәм наҙлы ҡурай моңо килеп ҡушыла — был ғәжәп башҡорт музыканты Исәнбаев художестволы һәм әсир иткес арияларын ҡурайҙа шулай уйнай. Ҡурай көйҙө үҙенең ниндәйҙер һағышлы моң монарына уратып биреүе менән айырылып тора...»

Париж күргәҙмәһендә башҡарған көйҙәре өсөн Йомабай Исәнбаев ҡиммәтле премиялар ала. Сит илдәр менән мәҙәниәт бәйләнешенең Бөтә Союз йәмғиәте (ВОКС) дипломдарын алып ҡайта.

Өфөгә ҡайтҡас, Йомабай Исәнбаевты Башҡорт күсмә драма театрына ҡурайсы-артист итеп эшкә ҡалдыралар. Был театрҙа эшләгән бер-ике йыл эсендә ул Башҡортостандың бөтә районларын йөрөп сыға, сәхнәлә ҡуйылған «Салауат батыр», «Ашҡаҙар», «Ҡарағол», «Ынйыҡай менән Юлдыҡай», «Шәүрәкәй» спектаклдәрендә ҡурайсы ролдәрен башҡара.

Был осорҙа Башҡорт драма театрында өс ҡурайсы — Ғиниәт Ушанов, Хәмит Әхмәтов һәм Йомабай Исәнбаевтар эшләй, һәр ерҙә, спектакль алдынан өс ҡурай менән сығыш яһап, улар халыҡтың иң яратҡан көйҙәрен уйнай. Бер аҙҙан был ҡурайсылар триоһы, Мәскәүгә барып, Ҙур театр сәхнәһендә лә сығыш яһап ҡайта.

1927 йылдың йәйендә Германияның Майндағы Франкфурт ҡалаһында Бөтә донъя музыка күргәҙмәһенә лә Башҡортостандың данлы ҡурайсыһы Йомабай Исәнбаев ебәрелә. Ул унда «Урал», «Буранбай», «Сәлимәкәй» һәм «Сыңрау торна» көйҙәрен уйнай. Ҡурайсыны тамашасылар көслө ҡул сабыуҙар менән тағы ла өс тапҡыр саҡырып сығаралар. Сәхнәнән йәнә башҡорт көйҙәре «Аҡ мәсет», «Байыҡ», «Ҡара юрға» яңғырай.

Германияның Европа концерттары бүлеге етәксеһе Лебидондың саҡырыуы буйынса бер төркөм совет артистары профессор Г.Любимов етәкселегендә Берлинға киләләр һәм унда биш концерт бирәләр. Артабан гастролдәр Гамбург, Росток, Шверин, Ганновер һәм башҡа ҡалаларҙа, унан инде Швецияның Стокгольм, Гётеборг, Вестерос, Венерсборг һәм башҡа 22 ҡалаһында үтә. Бөтәһе 27 концерт бирелә. Биш айға һуҙылған был оло сәфәрендә Европа ҡалаларында ойошторолған 54 концертта ҡатнашып, Йомабай Исәнбаев тарафынан 55 боронғо башҡорт халыҡ көйө уйнала.

Был концерттарҙа шулай уҡ даны донъяға таралған йырсы — илебеҙ халыҡтарының йырҙарын шул телдәрҙә һәм шул халыҡтың милли кейемендә башҡарыусы Ирма Яунзем ҡурайҙа Йомабай Исәнбаев оҙатыуында «Ҡурай» һәм «Абдрахман» тигән башҡорт халыҡ йырҙарын башҡорт һәм рус телдәрендә башҡара. Яунзем был йырҙарҙы Йомабайҙан өйрәнеп йырлай.

РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы Ирма Петровна Яунзем үҙенең 1968 йылда Мәскәүҙә сыҡҡан «Человек идет за песней» китабында Германияла Халыҡ-ара музыка күргәҙмәһендә Йомабай Иҫәнбаев менән бергә сығыш яһаған мәлдә төшөрөп алынған фотоһүрәтте урынлаштыра, башҡорт халҡының тарихи йырҙары хаҡында һоҡланып яҙа, уларға ҙур баһа бирә. 1973 йылда ул, атаҡлы ҡурайсы Ғата Сөләймәновтың хатына яуап итеп, Й.Иҫәнбаев хаҡында бик йылы, тойғоларға бай иҫтәлек яҙып ебәрә.

Мәшһүр ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаев 1929 йылда, тыуған яҡтарына ҡайтып, бер төркөм ауыл кешеләре менән Таналыҡ йылғаһы буйында яңы ауылға ойошоп, колхоз төҙөйҙәр. Уны, донъя күргән, алдынғы ҡарашлы коммунисты, «Һарыкүл» колхозының рәйесе итеп һайлайҙар.

1930 йылда Й.Иҫәнбаевты Түбәнге Смаҡ ауылына (шулай уҡ колхоз рәйесе итеп) күсерәләр.

1940 йылда уны, нахаҡҡа ғәйепләп, ҡулға алалар. Унан иң һуңғы хәбәр — 1941 йылда Ульяновск ҡалаһынан Бөйөк Ватан һуғышы фронтына китеп барыуы тураһында яҙған хаты була.

* * *

Йомабай Иҫәнбаев менән Ғиниәт Ушановтарҙан һуңғы быуын ҡурайсылар — Хәмит Әхмәтов, Ғәлиастан Шәмсетдинов, Рәхмәтулла Бүләкәнов менән Мөхәммәт Рәхмәтуллин, Ғата Сөләймәнов менән Заһир Исмәғилев, Ишмулла һәм Сәйфулла Дилмөхәмәтовтар Башҡортостандың данлыҡлы ҡурайсы-артистарына әүерелделәр. Ҡурай моңо Бөтә донъя студенттар һәм Халыҡ-ара йәштәр фольклор фестивалдәрендә лә яңғыраны.

БАССР Мәҙәниәт министрлығы ҡарары менән 1978 йылдан алып Йомабай Иҫәнбаев исемендәге призға ҡурай, ҡумыҙҙа уйнау һәм өҙләү оҫталығы буйынса республика бәйгеләре үткәрелә башланы. Был бәйгеләрҙә еңеүселәр араһында исемдәре республикаға һәм илебеҙгә киң танылған Юлай Ғәйнетдинов, Азат Айытҡолов, Сәйфулла Дилмөхәмәтов, Мөхәммәт Түлебаев, Ташбулат Дәүләтшин, Ишморат Илбәков, Рәсүл Ҡарабулатов, Дәүләтбай һәм Айбулат Рәхмәтуллиндар, Зыя Хәлилов, Роберт Юлдашев, Асрар Газин кеүек оҫта ҡурайсылар лауреат исеменә лайыҡ булды.

Йәйҙең иң матур көндәрендә мәшһүр ҡурайсының тыуған яғында — Матрай совхозында һәм Хәйбулла районы үҙәге Аҡъярҙа Йомабай Иҫәнбаев көндәре үткәрелә.

1991 йылда Й.Иҫәнбаевтың тыуыуына 100 йыл тулыуы республика кимәлендә киң билдәләнде. Башҡортостан Республикаһының Юғары Советы Рәйесе М.Ғ.Рәхимовтың Указы менән ҡурай сәнғәтен пропагандалауҙағы, данын донъяға билдәле итеүҙәге оло хеҙмәттәре өсөн Йомабай Иҫәнбаевҡа Башҡортостандың халыҡ артисы тигән маҡтаулы исем бирелде (үлгәндән һуң). Милли йыр һәм ҡурай сәнғәтенең талантлы улына халҡыбыҙҙың бөтмәҫ-төкәнмәҫ ихтирамы, йөрәк хистәре сағыла унда.